# “Ете ырыу” йыйыны.

**Ҡыҙ:** Олатай, әйт әле, Ватан нимә була ул?

**Олатай.** Ватан - ул ҡыҙым,

Тыуған ил,

Бына беторған урын,

Был ерҙә ғумер кисергән

Ата – олатайҙар борон.

Йырсылар торған был ерҙә,

Сәсәндәр булған элек,

Ватандың нимә икәнен

Әйткәндәр былай тиеп:

Ай, Тыуған ил, Тыуған ил,

Тыуған ил ул – тыуған ер,

Атай кейәү булған ер,

Әсәй килен булған ер,

Кендегемде киҫкән ер,

Ирҙәрҙе ир иткән ер,

Яуызды хур иткән ер,

Батырға дан биргән ер,

Халҡына һан биргән ер,

Ана шул ер – Тыуған ил,

Ана шул ил – Тыуған ер.

Аңланыңмы инде, ҡыҙым?

**Ҡыҙ:** Аңланым. Олатай, ә бөгөн ниндәй байрам була ул беҙҙә?

**Олатай:** Бик оло байрам, ете ырыуҙың вәкилдәре беҙҙең менән осрашыуға килә.

**Ҡыҙ:** Ана, Ана ҡунаҡтар күренәләр.

**Өләсәй:** Килендәр әҙерләгеҙ һыйығыҙҙы

Ете ырыуҙан ете кеше беҙгә ҡунаҡҡа килә. (Беәең көйө яңғырай)

Ете ырыу вәкиле килеп керә, бейеүсе ҡыҙ уларҙы ҡаршы ала, бауырһаҡ менән һыйлай.

**Марсель:** Еркәйемдең тарих һөйләмәгән

Юҡ һуҡмағы, юҡ тауы.

**Нәфисә:** Үҙ телемдә һөйләшәм

Минә ҡоштар көнләшә

Үҙ телемдә һөйләшәм

Минә ҡояшҡа тиңләшәм.

**Ғайсар:** Башҡорт балаһы мин,

Ур хәтерендә

Мең йыл уйылып барған әҙәм бар.

Быуындарға ялғап быуындарҙы

Илде тотҡан телем, һуҙем бар.

**Сөмбөл:** Хоҙайҙың мин үҙ балаһы,Иманым минең – башҡорт

Ер менән кңкте бәйләнем,

Урал тауына ашып.

**Байрас:** Ҡайҙа булһаҡ та,аҡларбыҙ

Халҡыбыҙ өмөттәрен

Дуҫлыҡ сафлығын аҡларбыҙ,

Беҙ – Өфө егеттәре,

**Алһыу:** Минең Ватаным

Океандар киң

Гүзәлектә ул

Сәскәләргә тиң.

Минең илемдә

Ҡояш та яҡты,

Йондоҙҙар ҙа шат,

Ер ҙә бик яҡшы.

**Иҙелбай:** Ҡурай сәскә – ете таж,

Нигеҙе – ете ырыу

Бар милләттәре менән ьергә

Бәхетле тормош ҡороу,

**Олатай:** Балалар бер килгәсегеҙ әйҙйгнҙ йырлап – бейеп күңул асып алығыҙ.

( музыка уйнай балалр уйнай « йәшерем яулыҡ" һөнәрҙәр күрһәтәләр.

**Олатай:** Эй балаҡайҙарым, миңә һеҙҙең менән бик күңелле.

Һеҙ үҙ телегеҙҙе беләһегеҙ, афариндар!

**Олатай:** Телһеҙ башҡорт кем булып?

Телен белгән шул булыр.

**Олатай:** Моңһоҙ башҡорт кем булыр?

Моңон белмәгән шул булыр!

**Олатай:** Ғәмһеҙ башҡорт кем булыр.

Йоҡлап йөрөгән шул булыр!

**Олатай:** Хисһеҙ башҡорт кем булыр?

Халҡын һатҡан шул булыр!

**Бөтәһе бергә:** Үҫтерәек илебеҙҙе,

Онотмайыҡ телебеҙҙе.

**Иҙелбай:** Башҡортостан һине аңлау өсөн

**Лилиә:** Далаларың кеүек киң күңелле.

**Байрас:** Йылғаларың кеуек моң – һағышлы

**Индира:** Урмандарын кеүек мең балҡышлы,

**Марсель:** Ҡаяларың кеүек бөйөк,серле

**Милена:** Булыу кәрәк!

**Бөтәһелә бергә:** Ерем – Башҡортостан

**Олатай:** Эй  балаҡайҙарым һеҙҙең

Һүҙҙәр дөрөҫ, һәр ваҡыт

Аҡыллы булығыҙ,

Миңә лә тыныс булыр!

“Башҡортостан гөлбостан “ йыры башҡарыла.